*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# ЯУЛАНАҺЫ ҮРҘӘР

«Башҡортостан Республикаһының халыҡ мәғарифы үҫеше тарихы» музейының рәсми асылыуы республикала ғына түгел, бөтә Рәсәй кимәлендә оло яңылыҡ булды. Халыҡ мәғарифы министры Ғәлиә Мөхәмәтйәнова ойоштороп ебәргән был әһәмиәтле эш тәүге көндән үк йәмғәтселектә ҡыҙыҡһыныу уятты. Төркөмләп тә, берәмләп тә килеп сығыусы тамашасыларҙан тыш, мөһим башланғысты күтәреп алып, уның эшенә ниндәйҙер ярҙам күрһәтергә, фондын байытырға тырышыусылар ҙа табылған. Элекке мәғариф министрҙары, мәғариф тарихын өйрәнеүсе ғалимдар, айырым энтузиастар музей фондына үҙҙәренең шәхси архивтарындағы документтарҙы, фотоһүрәттәрҙе тапшырған.

Музей директоры Мөхөтдинова Рәзифә Зиләүәр ҡыҙы:

— Әлегә фондҡа 2500 дана материал ҡабул ителде, — ти. — Улар ике дөйөм тарихи осорға бүленеп күрһәтеләсәк: рухи сығанаҡтар һәм октябрь революцияһынан һуңғы осор. Музей фәнни йүнәлештә эшләргә бурыслы, шуға күрә бында төрлө-төрлө мәҙәни саралар, арҙаҡлы шәхестәр менән осрашыуҙар, «түңәрәк өҫтәл» эргәһендә үткәрелгән әңгәмәләр, фәнни конференциялар ойоштороу күҙ уңында тотола. Үҫеп, нығынып, матди яҡтан аяҡҡа баҫҡас, айырым шәхестәрҙең, уҡыу йорттарының (мәҙрәсәләрҙең дә) юбилейҙары айҡанлы, башҡа төрлө тарихи ваҡиғаларға арнап брошюралар нәшер итергә лә хыялланабыҙ. Маҡсатыбыҙ — Башҡортостан Республикаһының халыҡ мәғарифы үҫеше тарихын өйрәнеү, анығлау, Рәсәй һәм донъя кимәлендә уны билдәле яһау, шул уҡ ваҡытта уның үҙенә генә хас милли колоритын күрһәтеү. Маҡсатыбыҙға ярашлы төрлө (яҙма, видео, фото) документтарҙы, рәсми ҡағыҙҙарҙы, уҡыу-яҙыу кәрәк-яраҡтарын, өлгөргәнлек аттестаттарын, дипломдарҙы, грамоталарҙы, орден-миҙалдарҙы туплаһыҡ, — тип һүҙен дауам итте директор. — Эш ысулы итеп фәнни йүнәлеште һайлағас, үҙебеҙҙең фәнни китапханабыҙҙы ла ойоштороп ебәрге киләсе. Бөгөнгө менән ҡәнәғәт булып ултырыу беҙҙең өсөн ят, халыҡ мәғарифының быуаттарға артылған тарихы һәм уны һыйҙырырға тырышҡан 50 м$^2$ майҙан беҙгә ҡул ҡаушырып ултырырға ирек бирмәйәсәк. Тимәк эҙләнергә, яңы экспозициялар, күргәҙмәләр өсөн иркен бүлмәләр табырға тура киләсәк.

Ысынлап та, музей ишектәрен донъяға киң асып, эште башлап ҡына торғас, хәл итер мәсьәләләре лә тыуып өлгөргән. Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһында баҫылған «Халыҡ мәғарифы» тигән бүлекте төп нигеҙ итеп алып, күргәҙмә материалдарҙы ошо йүнәлештә ҡороуҙары маҡтауға лайыҡ. Республика мәғарифының тарихи йылъяҙмаһы эҙмә-эҙлекле яҙылырына өмөт ҙур.

Башҡорттарҙа тәрбиә һәм уҡытыу системаһы быуаттар һуҙымында формалаштырылған, һәм был ауыҙ-тел ижадында, боронғо традицияларҙа, ғөрөф-ғәҙәттәрҙә асыҡ сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, ошо йәһәттән йырыбыҙ «Йүркә Юныс»ты иҫләмәй булмай. Унда ҡайын туҙының яҙыу-һыҙыу материалы сифа-

тында ҡулланылғанлығы мәңгеләштереп ҡалдырылған:

Шар ҡайынҡайҙарға хаттар яҙған
Йүркә Юныс — Кирәй балаһы.

Яҙыу-һыҙыуҙа башҡорттарҙың төрлө материал ҡулланыуы «Өкөр көйө»ндә:

Ҡаҙ ҡанаты ҡәләм булыр
Яҙыу белгән әҙәмгә, — тип, «Ҡул тамғаһы һалдым ташына», «Билдә сәнстем йөрөгән ерҙәргә», «Яҙыу яҙҙым аҫыл ташына» тип йырлана «Дүнгәүер», «Тәүәккәл ир», «Биҙгеле» йырҙарында. «Алпамыша» әкиәтендә лә ошо боронғо йолаға аҫыл миҫалдар бар. Тимәк, «Башҡорт халыҡ ижады» томдарының музей фондында һаҡланыуы ла үтә тәбиғи күренеш икән. Ҡайын туҙына, мал тиреһенә, ташҡа баҫылған яҙмалар ҙа оҙаҡламай урын алыр әле бында. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәт-яҙмалар ғына ни тора бит! Бына ҡайҙа ул беҙҙең башланғыс!

Башҡорттар илендә ислам дине тарала башлағас, мәсеттәр янында дини мәктәптәр асыла. Әлбиттә, улар белемгә ынтылыусы алдынғы кешеләрҙе ҡәнәғәтләндереп бөтмәй. Бер ҙә юҡҡа Насретдин әл Насыри, Ғилметдин Сәнжәр әл Башҡорди кеүек Мысырға тиклем аң-белем эҙләп сәфәр сығып, донъяға билдәле башҡорттар тарихта яҡты эҙ ҡалдырмаған. Киләсәк быуынды тәрбиәләр, унның аң-ғилем даирәһен киңәйтер музейҙа халҡыбыҙҙың ошо изге ынтылышы ла сағылыш табыр әле.

Р. Фәхретдинов Көньяҡ Уралдағы ислам мәктәптәренең тарихы XVI быуаттан башлана тип раҫлаған. Көнсығыш-мосолман тибындағы уҡытыу-тәрбиә учреждениелары үҫеп, унда ғәрәп яҙмаһы өйрәтелеп, Ҡөрьән һәм шәриғәткә нигеҙле тәрбиә бирелә. Башлыса Бохара, Бағдат һәм башҡа ислам үҙәктәренән ебәрелгән миссонерҙар ошо эш менән шөғөлләнә. Тимәк, сәйәхәтсе, илсе, ғалим һәм башҡа сүрәттә башҡорт иленә аяҡ баҫҡан миссионерҙарҙы ла теүәлләйһебеҙ бар икән әле.

В.О. Ключевский белем һәм тәрбиәне ике өлөшкә бүлеп тикшергән: рухи атмосфера тыуҙырыусы халыҡ педагогикаһы һәм мәктәп. Ошо тәүге сығанаҡты ла кәүҙәләндерергә тейешбеҙ музейҙа.

«Аҡрынлап уҡымышлы башҡорттар араһынан абыҙҙар килеп сыға һәм мосолмандарҙың тәрбиәүи традицияларын дауам итә», — тип белдерә музей стендындағы яҙыу, һәм ошоно дәлилләп бик күп фотодокументтар эленгән. Алдынғы мәҙрәсәләрҙән «Ғәлиә», «Хөсәйениә» һәм «Ғосмания»ның, Өфө ҡалаһының 1-3-сө собор мәсеттәренең фотоһүрәттәре бар. Мәсет-мәҙрәсәләрҙең дә теҙмәһен дауам итергә кәрәк, сөнки ғилми яҙмаларға ҡарағанда, улар Ырымбур губернаһында XVIII быуат аҙағына 100-ҙән ашып киткән. Ул мәҙрәсәләрҙең башҡорттарҙан тыш башҡа төрки халыҡтарына ла уҡыу-тәрбиә үҙәге булғанлығын дәлилләүсе материалдар ҙа күҙгә ташланып тора. Башҡорт ерлегендә белем алып, арҙаҡлы шәхес булып киткән башҡа милләт әһелдәрен дә күрһәтһәк ине музейҙа. Әлегә ошо үҙәктәрҙә китаптар күсереп дан-шөһрәт яулаған йәки күрәҙәсе-дауасы булып киткән хаттаттар, хәҙрәттәр, ҡарыйҙар исемлеге лә теркәлмәгән. «Ватандаш» журналында улар хаҡында байтаҡ белешмә бирелгәйне инде. Музей экспонаттары араһындағы иман-хатип, ахун Хәйрулла Ғосмановтың (1846-1907) яңғыҙ фотоһы ошо эҙләнеүҙәрҙең башланып ҡына тороуын иҫкәртә.

1800 йылда яңынан ойошторолған Өфө епархияһында дин әһелдәре әҙерләүсе Дини семинария асылыуы башҡорт ерлегендә сәйәси яңылыҡ булып тора. Музей рус руханиҙарының эшмәкәрлеген, Башҡортостанда ошо ваҡыттан алып барлыҡҡа килгән урыҫ телле уҡыу йорттарын, йәғни урыҫ телен белгән милли интеллигенцияны әҙерләү осорон тулы яҡтыртырға ынтыла. Әле үк уларҙың исемлектәре теркәлгән, иҫтәлекле фотолар тупланған. Меценаттар хәрәкәтенә лә туҡталып үткәндәр, Йәнтүриндар, Солтанғәлиевтар ғаиләләренең архивтары ошо хаҡта һөйләй.

XIX быуат уртаһында крайҙа халыҡ мәғарифы системаһы яңы үҫеш осоро кисерә башлай. Крепостной хоҡуҡ бөтөрөлгәс, бөтә граждандарға ла белем алыуға юл асыла, сиркәүҙең мәктәпкә йоғонтоһо сикләнә. Урыҫ милли мәктәптәре селтәре киңәйә. Башҡортостанда халыҡ мәғарифы үҫешенең яңы этабын күрһәтерҙәй байтаҡ материалдар тупланып өлгөргән музейҙа, бигерәк тә башҡорт-татар мәғрифәтселәренең эшмәкәрлеген яҡтыртыусы документтар ҡыҙыҡлы. Ғәрәп яҙмаһын өйрәнеүҙә ҡулланылған уҡыу әсбабы, яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтары ла — бөгөнгө йәш быуын өсөн күрелмәгән тарихи ҡомартҡы. Өндәр ярҙамында грамотаға өйрәтеү ысулы, уҡытыуҙың синыф-дәрес системаһы, яңы донъяуи фәндәр индерелгәс, башҡорт һәм башҡа милләт балаларына рәсми уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинлеге асылғас, төрлө уҡыу әсбаптары нәшер ителгән. Төрки дәреслектәренең бихисап күргәҙмәһе халыҡ мәғарифы үҫешенең яңы этабын билдәләй.

Октябрь революцияһынан һуң мәғариф системаһы нигеҙҙә үҙгәртелә: уҡыу округтары, халыҡ училищеларының дирекциялары һәм инспекциялары бөтөрөлә, уҡыу йорттары дәүләт ҡарамағына күсә, улар менән халыҡ комиссариаты етәкселек итә. Шул айҡанлы комиссарҙар исемлеге бирелгән. Артабан уларҙы алмаштырған министрҙар стендтары тулы түгел әлегә. Бөгөнгө һау-сәләмәт министрҙар, бәлки, үҙҙәре үк был залды байытыу сараһын күрерҙәр.

Октябрь революцияһынан һуңғы мәғариф үҫеше тарихына ҡағылышлы бихисап фотодокументтар, яҙма материалдар йыйылған музейҙа, «яңәлиф» тип аталған латин графикаһында баҫылған китаптар, наҙанлыҡты бөтөрөргә саҡырған ликбез өндәмәләре, өлгөргәнлек аттестаттары, мәктәп ихатаһындағы өмәләр шул осор яңылыҡтарын күрһәтә.

Һуғыш алды, һуғыш осорондағы мәғариф үҫеше тарихы ла ярайһы күҙаллanған музейҙа. Ете йыллыҡ мәжбүри белем биреү, юғары белемле кадрҙар әҙерләү хәрәкәте менән билдәле был осор. Шул уҡ ваҡытта һуғыш арҡаһында күп кенә мәктәптәрҙең госпиталь вазифаһын үтәүе, етем балаларҙың, ғәрип-ғөрәбәләрҙең артыуы менән дә характерлана ул. Ленин ордены, хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнгән уҡытыусылар һанының ишәйеүе, балаларҙың таҙа яҙыу дәфтәрҙәре эсендә бөгөнгә тиклем һаҡланған икмәк карточкалары һуғыш осорондағы халыҡ мәғарифы үҫешенең ҡатмарлы юл үтеүен иҫбатлай.

Тыныс тормошҡа күсеү алға киң пландар, киләсәккә йүнәлтелгән бурыстар ҡуя. Шуға ла музейҙа дәүер яңылығы булып уҡытыусылар съездарын үткәреү традицияһы һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Бында съезд делегаттарының берәмләп тә, төркөмләп тә төшкән, һаргайып бөткән фотоһүрәттәре осор йылъяҙмаһын тулайым күҙ алдына баҫтыра. Дөйөм урта белем биреү ҡарарҙары, балалар йорттарының, интернат-мәктәптәрҙең, юғары уҡыу йорттарының, уҡыусыларҙың ижади мөмкинлектәрен үҫтерер, ялын ойошторор йорт һәм турбазаларҙың йылдам үҫеше мәғарифтың ни тиклем алға китеүен билдәләй.

Аҙаҡҡы съездан һуң (1989 йыл) мәғариф эшенең төрлөләнеүе, инновацион формаларҙың ойоштороу эшенә инеүе киләсәк эштәргә яңы, файҙалы йүнәлеш бирмәксе. Әлегә улар хаҡында музей стендына цитаталар ғына эленгән. Тимәк, музей хеҙмәткәрҙәренә эҙләнер өлкәләр, дөйөм алғанда, яуланаһы үрҙәр алда әле.

Э